# Башҡорт Википедияһы ирекмәндәре

Википедия
Ирекле энциклопедия

WIKIMEDIA

БАШҠОРТОСТАН
викимедиасылары
төркөмө



**Кешелек туплаған барлыҡ ғилемде һәр кем ирекле ҡуллана алған донъяны күҙ алдына килтерегеҙ. Беҙ нәҡ шул донъяны төҙөйбөҙ!**




Дербент 2017 викисеминарында Башҡорт Википедияһы менән таныштыра.

**Сәлихов Зөфәр Ғәбделәхәт улы** – нефть химияһы сәнәғәте хеҙмәткәре, хаҡлы ялда. Өфө нефть институтын тамамлаған. 2007 йылдан Башҡорт Википедияһының әүҙем мөхәррире, бейе һәм хакимы, барлыҡ проекттарҙың әйҙәүсеһе. Башҡорт Википедияһын үҫтереүгә һалған тырышлығы өсөн Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының «Ал да нур сәс халҡыңа» миҙалы менән бүләкләнгән (2016).

**Зөфәр Сәлихов:** Мин Википедияла эшләй башлағанда йыш ҡына: «башҡортса Википедия ниңә кәрәк, руссаһы бар бит», тиҙәр ине. Башҡортса китаптар, гәзит-журналдар, радио-телевидение кәрәкме, руссаһы бар бит тип тә тынысланырға була. Философтар тарихтың спираль формаһында ҡабатланыуын әйтә. Заманында башҡортса театр, телевидение асып спиралдең бер урауын үткәнбеҙ. Хәҙер беҙгә интернет килеп етте, туған телебеҙ мотлаҡ интернетта ла булырға тейеш. Тарихта булған күренекле шәхестәр һәм ваҡиғалар, төрлө фәнни һәм географик асыштар минең өсөн бик ҡыҙыҡлы һәм ошо турала мәғлүмәт ирекле сығанаҡтарҙа булырға тейеш. Википедия был мөмкинлектәрҙе бирә.

**Чернев Вячеслав** – филолог, полиглот, Польша университеты докторанты. Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт теле факультетын тамамлаған. Башҡорт Википедияһын камиллаштырыуға ҙур өлөш индерә. 2009 йылдан Башҡорт Википедияһы ирекмәне, бейе һәм хакимы.




Wikimedia CEE Meeting 2018 — Үҙәк һәм Көнсығыш Европа илдәре викимедиасылары конференцияһында, Украина, Львов, 2018 йыл.

**Вячеслав Чернев:**

Википедия һәм уның туғандаш проекттары төрлө илдәр, төрлө милләт, төрлө мәҙәниәт, төрлө һөнәр кешеләрен берләштерә.

Кесе телдәр булып иҫәпләнгән телдәр үҫешенә ҡөс-ҡеүәт өҫтәй, интернет селтәрендә уларға үҙ урынын биләргә ярҙам итә. Википроекттарҙың иң мөһим әһәмиәте тап шунда тип уйлайым. Башҡорттарҙы булған мөмкинлек менән киңәрәк ҡулланырға саҡырам.



Башҡорт Википедияһының 10 йыллығына арналған конференцияны аса. Өфө, 2015 йыл.

**Ситдиҡова Гүзәл Рамаҙан ҡыҙы** – башҡорт шағиры, прозаик, публицист, тәржемәсе һәм йәмәғәт эшмәкәре. Силәбе дәүләт мәҙәниәт институтын тамамлаған. Башҡорт АССР-ы XII саҡырылыш Юғары Советының халыҡ депутаты (1991—1995), Башҡортостан Республикаһының 1—3-сө саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтай депутаты (1995—2008), Башҡортостан Республикаһының 1-се саҡырылыш Йәмәғәт Палатаһы ағзаһы (2011—2012), Башҡортостан Республикаһы Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәте рәйесе (2004—2011), Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар берлектәре ағзаһы (1995), Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре (2007). Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге дәүләт премияһы лауреаты (2017). 2012 йылдан Башҡорт Википедияһы мөхәррире. «Азия айлығы» халыҡ-ара конкурсы һөҙөмтәләре буйынса ике тапҡыр «Азия илсеһе» исеменә лайыҡ булыусы. Белорет районында тыуған, Өфө ҡалаһында йәшәй.

**Гүзәл Ситдиҡова:** Ғөмүмән, башҡортса Википедияла мәҡәләләр бик уйлап һалына. Һәр береһе ниндәйҙер матур бер мәғлүмәт бирә, ниндәйҙер әһәмиәткә эйә. Донъя мәҙәниәтен, фән һәм цивилизация ҡаҙаныштарын халҡыбыҙға еткереү менән бер рәттән, Википедияның башҡа тел бүлектәрендә беҙ үҙебеҙҙең республикабыҙҙы, тарихыбыҙҙы, шәхестәребеҙҙе, рухи ҡомартҡыларыбыҙҙы, телебеҙҙе лә күрһәтергә, күтәрергә тейешбеҙ. Бына ошо үҙе милли идеялыр.

**Ғатауллин Рөстәм Шакирйән улы**, **Рөстәм Нурыев** – иҡтисадсы, дәүләт хеҙмәткәре, йәмәғәт эшмәкәре. Өфө иҫәпте механизациялау техникумын һәм Бөтә Рәсәй финанс-иҡтисад институтын тамамлаған. Рәсәй Федерацияһы дәүләт граждандар хеҙмәтенең 1-се класлы кәңәшсеһе (2005). Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһының Журналистар союздары ағзаһы (2018). Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған иҡтисадсыһы (2003), Статистика отличнигы (2010). 2005 йылдан Башҡорт Википедияһы ирекмәне һәм хакимы, «Викимедиа РУ» Рәсәй йәмғиәт ойошмаһынының «Вики-премия» лауреаты (2014, 2018). Мәсетле районында тыуған, Өфө ҡалаһында йәшәй.

**Рөстәм Нурыев:** Ҡайһы ваҡыт «Википедиянан һиңә ниндәй файҙа?» – тигән һорау бирәләр. «Матди яҡтан бер файҙаһы ла юҡ, әйҙәүсе булғанлыҡтан, йыш ҡына кеҫәгә лә һуға. Әммә, мин бер ниндәй аҡсаға ла һатылмаған ижад ләззәтен алам. Кемдер марка йыя, кемдер балыҡ ҡармаҡларға әүәҫ, бәғзеләр хоккей-футбол көйәрмәне. Бына беҙ Википедия яҙабыҙ. Уҡыусылары булғас, яҙыусылары ла булырға тейеш бит. Мин Википедия менән шөғөлләнергә яратам. Ер йөҙөндә минең кеүек кешеләр һаны 80 миллион булды» – тип яуаплайым. Ижад ҡомарын һәм ләззәтен татырға теләһәгеҙ, берҙәм ирекмәндәр ғаиләһенә ҡушылығыҙ!



Рәсәй википедистарының 2017 йылғы Вики-конференцияһында секция ултырышын алып бара, Мәскәү, 2017.



Башҡорт Википедияның
10 йыллығына арналған
конференцияла фекер
алышыуҙа ҡатнаша.
Өфө, 2015 йыл.

**Аҡбутина Әлфиә Носрат ҡыҙы** – журналист, тәржемәсе, хаҡлы ялда. Башҡорт дәүләт университетын тамамлаған. 1988 йылдан СССР Журналистар союзы ағзаһы. Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре (1997), Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты (2005). 2015 йылдан Башҡорт Википедияһы мөхәррире. «Азия айлығы» халыҡ-ара конкурсы һөҙөмтәләре буйынса «Азия илсеһе» исеменә лайыҡ булыусы (2016).

**Әлфиә Аҡбутина:** Википедия – заманыбыҙҙың иң ҡыйыу, иң ылыҡтырғыс, иң ярҙамсыл, бер ни менән алмаштырып булмай торған проекттарының береһе. Ирекмән арҡадаштарым менән күмәкләп беҙ Башҡорт Википедияһы ла шулай булһын тип тырышабыҙ. Бында башҡорт халҡының теленә, мәҙәниәтенә, тарихына, ижтимағи-сәйәси тормошона ҡағылышлы бай мәғлүмәт туплана. Уны донъяның һәр бер мөйөшөндә тороп ҡулланырға, яңыларын өҫтәргә, булғанын мөхәррирләргә мөмкин. Күмәкләп ижад ителеүсе виртуаль энциклопедия – замандаштарға ярҙамсы, киләсәк быуындарға лайыҡлы мираҫ ул.

**Нуретдинов Ансар Әнүәр улы, Айсар Үҙәнбаев** – филолог, журналист, хаҡлы ялда. Мәсәғүт педагогия училищеһын һәм Башҡорт дәүләт университетын тамамлаған. 2015 йылдан Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының Журналистар союздары ағзаһы. 2014 йылдан Башҡорт Википедияһы ирекмәне. «Башҡортостан яҙыусылары», «Башҡортостан журналистары», «Юбилярға Википедия бүләге» проекттарының әйҙәүсеһе. 2015 йылғы «Азия айлығы» халыҡ-ара конкурсы һөҙөмтәләре буйынса «Азия илсеһе» исеменә лайыҡ булыусы. «Викимедиа РУ» Рәсәй йәмәғәт ойошмаһынының «Вики-премия 2019» лауреаты.



III Фин-уғыр викисеминарында Башҡорт Википедияһы тураһында сығыш яһай. Карелия, Петрозаводск, 2016 йыл.

**Ансар Нуретдинов:** Бар һөнәрҙәреңә өҫтәлмә тағы күңелеңә яҡын шөғөл булһа – донъя түңәрәккә әйләнә. Википедия, бер яҡтан, ижади шөғөл, икенсенән – күп яҡлы яңы мәғлүмәт бирә. Шулай булғас, нисек унан ситтә торорға мөмкин. Википедияла биш йылға яҡын булдым, әле лә ундамын, киләсәктә лә мотлаҡ буласаҡмын! Алға һәм алға!



Вики-Урал семинарында башҡорт вики-өләсәйҙәре феномены тураһында иғлан итә. Ижевск, 2016 йыл.

**Ниғәмәтйәнова Зәйтүнә Наримйән ҡыҙы, З. Әйле** – журналист. Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетын тамамлаған. 2002 йылдан Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының Журналистар союздары ағзаһы. Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре (2018). 2015 йылдан Башҡорт Википедияһы ирекмәне һәм проекттар әйҙәүсеһе. «Яңы йыл БУМ-ы!», «Башҡортостанда Әзербайжан айлығы» конкурстарын ойоштороусы. «Вики-өләсәйҙәр» төркөмө кураторы.

## Зәйтүнә Ниғәмәтйәнова:

Википедия, минеңсә – үҙеңдең генә түгел, теге йәки был милләттәшебеҙҙең белемендәге бушлыҡты башҡорт телендәге мәҡәләләр аша тулыландырыу йәки тулыландырырға тырышыу. Википедия – үҙ-үҙеңде, үҙ баһаңды баһалау майҙансығы: ул белем кимәлен асыҡлау ҙа, характер ныҡлығы ла, ниәттәреңдең ихласлығы ла, сөнки һәр ғәмәлең күҙ алдында һәм үҙе өсөн үҙе һөйләп тора. Уй-фекерендә бары тик матди ҡиммәттәр генә йөрөтөүселәр Википедияның файҙаһын күрмәүе лә, аңламауы ла мөмкин. Минең өсөн ул мөмкинлектәре бер ваҡытта ла кәмемәй, бөтмәй торған сикһеҙ байлыҡ сығанағы: мәғлүмәт байлығы ғына түгел, кеше байлығы ла. Википедия – ул барлыҡ телдәр бүлектәрендә лә ижади фекерләгән, һәр саҡ эҙләнеүҙәр юлында булған һәм көслө рухлы кешеләр берләшмәһе, һәм был уларҙан күп нәмәгә өйрәнергә, бәләкәй генә аҙымдар менән уларҙың артынан барырға һәм үҙ артыңдан башҡаларҙы эйәртергә дәртләндерә.

**Абдрахманова Ләйсән Булат ҡыҙы** – юрист, Башҡорт дәүләт университетын тамамлаған, 2012 йылдан Башҡорт Википедияһы ирекмәне. 2017 йылдан Викидәреслек хакимы. Сибай ҡалаһында йәшәй.



Вики-конференцияла Башҡорт Википедияһы эшмәкәрлеге менән таныштыра.
Мәскәү, 2017.

**Ләйсән Абдрахманова:**

**Тәү сиратта, Википедия аша туған телемә иғтибарым, һөйөүем артты, белемемде ҡулланырға ярҙам итте. Проекттарҙың күплеге һәм төрлөлөгө аша ҡыҙыҡһындырған өлкәне өйрәнергә була.** Уларҙың һәр ҡайһыһында теләге булған кеше үҙенә тап килгән шөғөл таба ала. «Компьютер артында ултырғандан» һуң эш һөҙөмтәһен күреүҙән ҡәнәғәтлек тойғоһо тыуа. **Яңы белем, яңы кешеләр, яңы тәьҫораттар сығанағы ул Википедия!** Донъя кимәлендә ҡыҙыҡлы кешеләр менән аралашыу – үҙе ҙур бонус.



Вики-конференцияла (Мәскәү, 2017), Халыҡ-ара конференцияла (Львов, 2018) ҡатнашыусы

**Ҡаһарманова Сәриә Мөхәмәдйән ҡыҙы** – башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы. Белорет педагогия училещеһын, Башҡорт дәүләт университетын тамамлаған. Филология фәндәре кандидаты (2011). Башҡортостандың мәғариф алдынғыһы (2005), «Иң яҡшы башҡорт һәм рус телдәре уҡытыусыһы» республика конкурсы еңеүсеһе (2007), «Рәсәй Федерацияһының иң яҡшы уҡытыусылары» конкурсы еңеүсеһе (2008), «Рәсәй дөйөм мәғарифының почетлы хеҙмәткәре» (2016), Хеҙмәт ветераны (2017), «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы – 2019» республика конкурсы лауреаты. «Вики-яҙ-2016» конкурсы еңеүсеһе.

**Сәриә Ҡаһарманова:**

Википедияға 2016 йылда ғына килдем. Бында яҙышыу теләге күптән булһа ла оҙаҡ ҡына ваҡыт башлап китеү юлдарын таба алманым. Эҙләгән таба, тигән шикелле, мин дә таптым, дөрөҫөрәге, Википедияла эшләгән ҡыҙҙар үҙҙәре миңә килеп юлыҡты. Мәктәп мәшәҡәттәренән бушаған арала Википедияла эшләп ҡалырға тырышам. Вики-юлды һайлаған уҡыусыларым булыуы һөйөндөрә.

**Мөхәмәҙиева Эльза Әнәс ҡыҙы** – журналист, дәүләт хеҙмәткәре. Белорет педагогия училищеһын һәм Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының филология факультетын тамамлаған. 2010 йылдан Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәй Федерацияһы Журналистар союздары ағзаһы. 2015 йылда Башҡортостандың иң яҡшы журналисы. 2015 йылдан Википедия ирекмәне. 2016 йылда Киев ҡалаһында үткән вики-конференцияла ҡатнашыусы.

## Эльза Мөхәмәҙиева:

Һәр быуындың халҡы алдында мотлаҡ үтәргә тейеш булған мөҡәтдәс бурыстары, ҡағиҙәләре була. Заманына ғына хас булған алымдар менән һәр кем уларҙы үҙенсә үтәй. Википедия иһә ошондай изге ниәттәребеҙҙе тормошҡа ашырыу өсөн барыбыҙға ла ҡулайлы майҙан ул. Бөтә донъяға билдәле булған ошо киң майҙанда халҡыбыҙҙың тарихын, арҙаҡлы шәхестәрен мәңгеләштерәбеҙ, милләтебеҙҙең үткәндәренә, киләсәгенә байҡау яһап, бөгөнгө йәшәйешен сағылдырабыҙ һәм быларҙың барыһын да беҙҙән һуң йәшәйәсәк быуынға аманат итеп тапшырабыҙ. Халҡым, телем тип янаһың икән, Википедия майҙанында эшләп, тарихыңды мәңгеләштереүгә үҙ өлөшөңдө индер, башҡаларға матур өлгө күрһәт!



Киев ҡалаһындағы вики-конференцияла Башҡорт Википедияһы менән таныштыра. 2016 йыл.



**Әхтәмова Азалия Айтуған ҡыҙы** – Белорет ҡалаһының Яныбай Хамматов исемендәге Башҡорт гимназияһының 8-се синыф уҡыусыһы. «Узнай мир. Начни с побратимов» халыҡ-ара вики-конкурсы еңеүсеһе.

**Азалия Әхтәмова:**

Башҡорт Википедияһына тәү сиратта үҙемдең тел белеү кимәлен үҫтереү теләге менән килгәйнем. Бер ни тиклем ваҡыт үткәс, ҡарашым үҙгәрҙе, һәм мин башҡорт телен һаҡлап ҡалырға, уны артабан үҫтерергә, донъя кимәленә сығарырға тырышыусылар сафына ҡушылдым.

Һин дә Википедияла яҙыша алаһың!

**Юлдашева Луиза Әбүталип ҡыҙы** – хаҡлы ялдағы уҡытыусы. 1982 йылда Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтының филология факультетын тамамлаған. Башҡортостандың мәғариф отличнигы (1997), «Иң яҡшы рус теле уҡытыусыһы» конкурсы еңеүсеһе (2012). Эшләгән осорҙа төп шөғөлөнән тыш оҙаҡ йылдар балалар хоҡуғын яҡлау буйынса штаттан тыш инспектор, аттестация комиссияһы ағзаһы була. 2017 йылдан Башҡорт Википедияһы мөхәррире. Бөрйән вики-клубы ағзаһы. Үҙәк һәм Көнсығыш Европа илдәре википедистары араһында үткәрелгән «Вики-яҙ 2018» конкурсының Башҡортостан өлөшөндә «йәш ирекмәндәр» номинацияһы еңеүсеһе.



Бөрйән районы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары съезындағы сығыштан һуң. Иҫке Собханғол, 2019 йыл.

**Луиза Юлдашева:**

Википедия миңә нимә бирә? Бер яҡтан Башҡорт Википедияһын алға сығарыу, киләһе быуындар өсөн кәрәкле мәғлүмәттәр булдырыу күҙ уңында тотолһа, икенсе яҡтан үҙемдең ниндәйҙер өлкәлә файҙалы эш эшләүем һәм ошо тормошта кәрәклегем ҡыуандыра. Өсөнсө яҡтан бала саҡтан һалынған ярыш сәме мине һәр саҡ алға әйҙәй, шуға күрә төбәк һәм халыҡ-ара конкурстарҙа ихлас ҡатнашам. Бүләктәрен дә алам!



Бөрйән районы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары съезындағы сығыштан һуң. Иҫке Собханғол, 2019 йыл.

**Ҡотлобаева Көнһылыу Зәки ҡыҙы** – биолог-ботаник, эколог, хаҡлы ялдағы биология һәм химия уҡытыусыһы. 1978 йылда Башҡорт дәүләт университетының биология факультетын тамамлаған. Башҡортостан Республикаһының мәғәриф алдынғыһы (1998). Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы (2004). «Рәсәй Федерацияһының иң яҡшы уҡытыусылары» конкурсы еңеүсеһе (2011). Башҡортостан Республикаһының Маҡтау грамотаһы менән бүләкләнгән (2009). 2015 йылдан Башҡорт Википедияһы мөхәррире. Бөрйән вики-клубы етәксеһе. Бөрйән районының Байназар ауылында йәшәй.

**Көнһылыу Ҡотлобаева:**

Ил менән бергә, хаҡ өсөн түгел, күңел талабы менән эшләнә торған шөғөл ул Википедия. Бында осраҡлы кешеләр юҡ. Төркөм берҙәм организм кеүек йәшәй. Бер-береһенә ярҙам итеп. Йәш айырмаһы тойолмай ҙа. Төркөмдә йәштәр булыуы бик тә һәйбәт. Яңы күс, алдынғы ҡараш, фекер йөрөтөү иркенлеге, алдынғы технологиялар... Ә оло быуын арсеналында белем, тәжрибә, күсеп йөрөй алыу иркенлеге… Пенсияға сығып та, ижади потенциалы ҙур булған әллә күпме кешеләребеҙ менән ил тулы. Уларға үҙ урынын табырға, юҡҡа сыҡмаҫҡа ярҙам итергә кәрәк.

**Ғизәтуллина Рәшиҙә Хәй ҡыҙы** – Белорет педагогия училищеһын, Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтын тамамлаған. Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы (1994). «Йәншишмә ҡайҙан башлана?» исемле китап авторы. Бөрйән районында «Кәрәҙ» ҡорамасылар клубы ойоштороп, был эшкә бөтә район ҡатын-ҡыҙҙарын йәлеп итә. Ҡорама шөғөлөн республика кимәлендә яҡлаған «Кәрәҙ» клубы халыҡ коллективы исемен йөрөтә. 2016 йылдан Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының мәҙәни, социаль һәм рухи үҫеш буйынса «Ағинәй» төбәк йәмәғәт ойошмаһының Бөрйән районы ағинәйҙәр ҡоро етәксеһе итеп тәғәйенләнгәндән бирле, районда Башҡорт Википедияһын пропагандалау һәм ойоштороу эштәрен алып бара. Бөрйән вики-клубы ағзаһы.



«Районда Башҡорт Википедияһын пропагандалау һәм ойоштороу эштәрен алып барам».

**Рәшиҙә Ғиззәтуллина:**

Бөгөнгө мәғлүмәт донъяһында фәҡәт тыныс һәм мәҙәни юл менән беҙ, милләт булараҡ, донъя кимәлендә үҙебеҙҙе лә, туған телебеҙҙе лә һаҡлаясаҡбыҙ.



«Ошо эшемдән кинәнес табам, берәй сәбәп менән бер көн яҙмаһам да, ваҡытым бушҡа үткән һымаҡ».

**Ҡыуандыҡова Таңһылыу Зәки ҡыҙы** – Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтының математика-физика факультетын тамамлаған. 37 йыл мәктәптә математика фәнен уҡытып, хаҡлы ялға сыҡҡан. Рәсәй Федерацияһы мәғарифы отличнигы (1990). 2016 йылдың 14 майынан алып Башҡорт Википедияһы ирекмәне, Бөрйән вики-клубы ағзаһы.

**Таңһылыу Ҡыуандыҡова:** Мин ни өсөн Википедияла эшләйем? Беренсенән, был бик кәрәкле эште кемдер эшләргә тейеш бит (һин дә мулла, мин дә мулла, атҡа бесән кем һала тигәндәй…).

Икенсенән, ошо кескәй генә хеҙмәтем мине халҡым менән бер бөтөн итә кеүек. Балаларым, ғаиләм өсөн генә йәшәмәйем, телебеҙ йәшәһен, юғалмаһын өсөн үҙ өлөшөмдө индерәм. Ошо эшемдән кинәнес табам, берәй сәбәп менән бер көн яҙмаһам да, ваҡытым бушҡа үткән һымаҡ. Ирекмәндәр сафы артһын ине, бигерәк тә йәштәр иҫәбенә.

**Науразбаева Нәсимә Әхмәҙиә ҡыҙы** – Стәрлетамаҡ педагогия институтының физика-математика факультетын тамамлаған, Бөрйән районы Байназар урта мәктәбендә 34 йыл математика фәненән белем биргән. Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы (1996 йыл). Башҡорт Википедияһы ирекмәне, Бөрйән вики-клубы ағзаһы.



**Нәсимә Науразбаева:** Ни өсөн Википедияла эшләргә булдым? Теүәл фән буларак математика күберәк урыҫ телендә алып барыла. Шуға күрә лә математиканың башҡорт телендә ҡулланыу даирәһен арттырырға ине, тигән теләк күптән бар ине. Бынан тыш, тыуған яғымдың патриоты буларак, Бөрйән районының күренекле шәхестәрен танытыу, тарихы, шәжәрәләре, ер-һыу атамалары юғалып ҡуймаһын тигән мәсьәләләре лә борсой ине. Ошоларҙы хәл итеүгә әҙ булһа ла көсөмдө индерә алыуыма бик шатмын.

«Математиканың башҡорт телендә ҡулланыу даирәһен арттырырға ине», – тигән хыял менән йәшәй һәм эшләй.

**Сәлихов Айҙар Зөфәр улы** – Өфө ҡалаһының 119-сы мәктәбендә 5-се синыфта уҡый.



БашВикиКонф-2017 конференцияһын аса, ҡатнашыусыларҙы сәләмләй. Өфө, 2017.

**Айҙар Сәлихов:**

Мин википедияла 2017 йылдың 21 ғинуарында теркәлдем, ул ваҡытта 3-сөлә уҡый инем. Викификатор тигән ҡоралды үҙләштереп, мәҡәлә форматтарын төҙәтергә булышам. Википедиялағы Башҡортостан ауылдары тураһындағы мәғлүмәттәрҙе байытыр өсөн берәй районға йәки ҡалаға барғанда юл буйындағы ауылдарҙы фотоға төшөрөп Викимилеккә ҡуя барам.

Википедияны файҙаланып, башҡорт теле дәресенә Мостай Кәрим һәм башҡорт ырыуҙары тураһында рефераттар әҙерләнем. Унан кәрәк материал табырға синыфташтарыма ла ярҙам итәм.

**Медейко Владимир Владимирович** – Рус Википедияһының иң тәүге ирекмәндәренең береһе – унда 47-се булып теркәлгән. Бөгөн – «Викимедиа РУ» коммерцияға ҡарамаған партнерлыҡ ойошмаһы директоры. 2007 йылдан Викимедиа фондының OTRS-агенты.



**Владимир Медейко:**
Донъя һанлыға әйләнә бара. Күптәр өсөн Интернетта булмаған нәмә йәшәүҙән туҡтай, ул бөтөнләй донъяла юҡ кеүек тойола. Ошондай шарттарҙа Википедия интернет энциклопедияһы – телде һәм мәҙәниәтте һаҡлау, үҫтереү йәһәтенән иң һөҙөмтәле сараларҙың береһе. Википедияның башҡорт телендәге бүлеге – йөкмәткеле һәм әүҙем, ул – ысын мәғәнәһендә беҙҙең ғорурлыҡ. Әммә өлгәшелгәндәр әлегә аҙ, юғарыраҡ һөҙөмтәгә өлгәшер өсөн эшләргә лә эшләргә, проектҡа яңы ирекмәндәр йәлеп итергә кәрәк. Алға, БашВики, алға!

Википедияның башҡорт телендәге бүлеге – йөкмәткеле һәм әүҙем, ул – ысын мәғәнәһендә беҙҙең ғорурлыҡ.



Википедистар эшләп кенә ҡалмай, ял да итә белә!

**Сөләймәнова Гөлшат Әхмәт ҡыҙы** – Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтының филология факультетын тамамлаған (1974). Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы (1993). Хеҙмәт ветераны (2004). 2016 йылдан Башҡорт Википедияһы ирекмәне.

**Гөлшат Сөләймәнова:**

Википедияла эшләй башлағаныма ҡыуанып бөтә алмайым, сөнки донъя яңылыҡтарын белеп барам, тыуған илемдең тарихы менән танышам, үҙемде кәрәкле кеше итеп тоям – шуныһы бигерәк һөйөндөрә. Бушлай эшләп ултыраһығыҙмы, тип аптырағандар бар. Ә тормош иптәшем, балаларым, дуҫтарым, киреһенсә, хуплап ҡына тора, хатта бәҫем артып китте! Килгән саҡта нык икеләнгән инем, булдыра алмаҫмын, башҡорт теле грамматикаһын белмәйем тип, әммә күп төрлө һүҙлектәр, өҙлөкһөҙ эҙләнеүҙәр, шәхси тырышлыҡ та телемде шымартырға ярҙам итә, шикелле. Ваҡытында мине әйҙәп БашВикиға индереп ебәреүселәр булған кеүек, мин дә ҡайһы берҙәрҙе «ҡоҙаланым», уларҙың уңыштарына хәҙер ҡыуанырға ғына ҡала. Әйҙәгеҙ, һеҙ ҙә Башҡорт Википедияһына, халҡыбыҙға хеҙмәт итәйек!

**Абарников Олег Игоревич** – футбол тарихсыһы, журналист, тәржемәсе. 2007 йылда Орёл дәүләт университетын тамамлаған. 2006 йылдан Викимедиа проекттары ирекмәне, Башҡорт һәм Лезгин Википедиялары хакимы, Рус Викияңылыҡтары мөхәррире. 2017 йылдан Рәсәйҙең «Викимедиа РУ» йәмәғәт ойошмаһы ағзаһы. Рәсәй халыҡтары телендәге Википедиялар ирекмәндәре мәнфәғәтен яҡлаусы. Н. Э. Бауман исемендәге Мәскәү дәүләт техник университеты хеҙмәткәре.




«Wikimedia Deutschland» йәмәғәт ойошмаһы офисында Башҡорт һәм Лезгин Википедиялары менән хеҙмәттәшлек тураһындағы һөйләшеүҙәр ваҡытында. Германия, Берлин, март, 2019 йыл.

**Олег Абарников:** Алматы ҡалаһында тыуғанмын. Ҡаҙаҡ һәм башҡорт телдәренең ныҡ оҡшашлығын 2015 йылда «Вики–Һабантуй»ға килгәс белдем. Рус Википедияһында күп йылдар йыйған тәжрибәм менән Рәсәй халыҡтары телдәрендәге Википедияларҙың әллә ни күп булмаған ирекмәндәре менән шатланып бүлешәм. Башҡорт википедиясыларының юғары әүҙемлеге миңә бигерәк оҡшай, уларҙың башҡаларға ярҙам итергә әҙерлеге һоҡландыра. БашВики – барыһына өлгө.



Виктор Семенюк донъя википедистарын вики-өләсәйҙәр менән таныштырҙы. 2017 йыл. Берлин.

**Семенюк Виктор Викторович** – иҡтисадсы, тәржемәсе. Киев милли иҡтисад университетын тамамлаған. 2015 йылдың 11 ноябрендә Викимедиа Фондының ҡушылыу буйынса комитеты (Wikimedia Affiliations Committee) Башҡортостан викимедиасылары берләшмәһен донъяла – 49-сы, Рәсәйҙә 1-се юзер-төркөм тип таныуҙа Викторҙың өлөшө бик ҙур. Башҡортса ла мәҡәләләр яҙып ҡуя. Киев ҡалаһында йәшәй.

**Виктор Семенюк:**

Википроекттарҙы 2009 йылдан мөхәррирләйем. Башлыса украин бүлегендә эшләйем, сөнки туған телемдә лә ирекле мәғлүмәттең күберәк булыуын теләйем. Шулай уҡ аҙ һанлы халыҡтар телдәре бүлектәренә даими ярҙам итергә тырышам. Ҡырым татарҙарынан башлағайным, сахаларҙа һәм башҡаларҙа дауам иттем. Яҙмыш миңә Башҡортостан һәм башҡорттар менән танышыу мөмкинлеген бирҙе. Бик көслө тәьҫораттар алдым. Донъяла Башҡортостанды бик аҙ белеүҙәре, әлбиттә, үкенесле күренеш: минән күптәр уның ҡайҙа икәнлеген һораша. Боронғо Уралдағы был матур республиканың йылдан-йыл үҙен күберәк таныта барыуына ҡыуанам. Башҡорт халҡының ғорурланырлыҡ һәм донъяға күрһәтер нәмәләре күп!

**Миңһылыу Фәйзрахман ҡыҙы Абдуллина** – уҡытыусы, эш стажы — 44 йыл. Башҡортостан Республикаһы мәғариф алдынғыһы, «Өфө ҡалаһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы-2009» һөнәри конкурсының II дәрәжә еңеүсеһе, Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Премияһы лауреаты (2009), Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең «Иң яҡшы башҡорт теле уҡытыусыһы» Гранты лауреаты (2010), «Педагог-тикшеренеүсе» һөнәри конкурсы еңеүсеһе (2010-2013). Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының «Ал да нур сәс халҡыңа» миҙалы менән бүләкләнгән (2019).



Миңһылыу Абдуллина конференция тураһында фекерҙәре менән уртаҡлаша. Мәскәү. Вики-конференция 2017

**Миңһылыу Абдуллина:**

Башҡорт Википедияһына өс йыл элек килдем. Быға тиклем оҙаҡ ҡына ауылым, яҡташтарым тураһында унда мәғлүмәт урынлаштырырға хыялланып йөрөнөм. Ниәтемдең тормошҡа ашыуына бик ҡәнәғәтмен. Беҙ, википедиясылар, рус теленән мәҡәләләр тәржемәләү менән бергә, яңыларын да яҙып, милләттәштәребеҙҙе үҙ телебеҙҙә төрлө илдәр, туристик төбәктәр менән таныштырабыҙ, виртуаль донъяла сәйәхәт итергә ярҙам итәбеҙ. Бер үк ваҡытта Башҡортостаныбыҙҙы, туған телебеҙҙе донъяға танытабыҙ. Бар эшебеҙ саф ирекмәнлеккә ҡоролған. Күңелегеҙ тартһа, үҙегеҙ теләп беҙгә ҡушылығыҙ!



Банат Вәлиева-Яубаҫарова Рәсәй викимедиасыларының халыҡ-ара конференцияһында Вики-өләсәйҙәр эшмәкәрлеге буйынса  махсус секция ултырышында сығыш яһаны. Мәскәү, 2017 йыл.

**Банат Вәлиева-Яубаҫарова** – Салауат педагогия училищеһын һәм Башҡорт дәүләт педагогия институтының рус теле һәм әҙәбиәте факультетын тамамлаған. 46 йыл рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләгән. Юғары категориялы уҡытыусы, «Уҡытыусы-методист», «Өлкән уҡытыусы». Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығының Маҡтау грамотаһы менән бүләкләнгән. Башҡорт Википедияһында 2016 йылдың февралендә теркәлгән. Барлыҡ семинарҙарҙың, конференцияларҙың һәм конкурстарҙың актив ҡатнашыусыһы. Өс йыл эсендә 1000-дән артыҡ мәҡәлә яҙған иң өлкән вики-өләсәй.

## Банат Вәлиева-Яубаҫарова:

65 йәшемдә хаҡлы ялға сыҡҡас, коллегам мине википедистар менән таныштырғас, метеор кеүек Башҡорт Википедияһына килеп индем дә, үҙ башҡорттарым өсөн үҙ туған телемдә мәҡәләләр яҙырға тотондом. Кешелек туплаған белемде башҡорттарға үҙ телдәрендә алып барып еткереү теләге минең өсөн юл күрһәтеүсе маяҡ булып торҙо. Рус һәм башҡорт телдәрен белеүемдән файҙаланып, йәмәғәт, иҡтисад фәндәре буйынса, мәҙәниәт, бигерәк тә үҙем яратҡан архитектура өлкәһендә мәҡәләләр яҙам. Хәҙерге көндә мин, үҙ йәшемә ҡарамаҫтан, тормошта үҙ урынымды таптым: республикама, милләтемә ҡулымдан килгәнсе хеҙмәт итәм. Википедия менән ҡыҙыҡһынған, уны уҡыған, көндәлек тормошонда ундағы мәҡәләләрҙе ҡулланған һәм тормош йәмен эҙләгән кешеләрҙең барыһын да Википедияға саҡырам: уҡығыҙ, белемегеҙҙе арттырығыҙ, яҙығыҙ, башҡаларҙы яңы белемдәр менән таныштырығыҙ. Теләгегеҙ булһа, һеҙ барыһын да был донъяла булдыра алаһығыҙ!

**Хаят Сәғит ҡыҙы Йосопова** – уҡытыусы, тәржемәсе, журналист, йәмәғәтсе. 1974 йылда Башҡорт дәүләт университетын тамамлаған. 1993 йылдан. Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһының Журналистар союздары ағзаһы (1993). Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре (1999). Башҡортостан Республикаһы Мәғлүмәт министрлығының Почет грамоталары (1995, 1997.) менән наградланған. Башҡорт Википедияһында 2017 йылдың ноябренән ҡатнашыусы вики-өләсәй.



**Хаят Йосопова:** Тормошобоҙҙағы барлыҡ һорауҙарға яуапты Интернеттан, шул иҫәптән Википедиянан табырға күнектек. Минеңсә, юғары технологиялар быуатында беҙҙең бөгөнгөбеҙҙә илдең һәм халыҡтың үткәне менән тап Википедия бәйләй. Китапханаларға йөрөмәйенсә лә кеҫә телефондары аша ла барлыҡ һорауҙарға яуап табырға мөмкин. Минең Башҡорт Википедияһындағы эшмәкәрлегем һәр башҡорт үҙенең тыуған яғының тарихынан башлап, донъя халыҡтары, ғаләм тарихын әсә телендә уҡый алыуға бағышлана. Алыҫ киләсәктә кешелек донъяһы бөтә мәғлүмәтте электрон форматта ғына аласаҡ. Әгәр ошоға тиклем тупланған мираҫыбыҙҙы Википедияға күсереп ҡалмаһаҡ, ҡиммәтле мәғлүмәттәр архивтарҙа, китапханаларҙа саңға батып ятасаҡ. Шуның өсөн мөмкинлегем булғанда Башҡорт Википедияһын тулыландырырға тырышам. Сөнки был минең ҡулымдан килә!

Хаят Йосопова БашҡортВикиКонфта ҡатнашыуына ҡәнәғәт!

**Павел Львович Каганер** – мәғлүмәт технологиялары белгесе. 2004 йылдан Викимедиа проекттарында, Рус Википедияһының Рәсәйҙең төбәк телдәрендәге Википедия бүлектәренә ярҙам итеү проектында ҡатнаша. «Викимедиа РУ» коммерцияға ҡарамаған партнерлыҡ ойошмаһы — Викимедиа хәрәкәтенең Рәсәй төбәк ойошмаһы ағзаһы. Башҡорт Википедияһында 2012 йылдан ҡатнаша, 2016 йылдан — хаким. Санкт-Петербургта йәшәй.



Викимедиа фонды хеҙмәткәре Виктор Григас менән осрашыу мәлендә. Санкт-Петербург, 2011 йыл.

**Павел Каганер:**

Викимедиа хәрәкәте маҡсаттарының береһен – кешелектең тел төрлөлөгөн һаҡлау һәм үҫтереүҙе иң мөһиме тип һанайым. Минең ҡарашҡа, Викимедианың вики-проекттары – төбәк телдәре өсөн шәп майҙансыҡ, улар унда интернетҡа килеп, ошо яңы аралашыу мөхитендә күп телле ирекле белем селтәренә ҡушылып үҫешә ала.

БашВики ирекле мөхәррирҙәре берлеге – Википедияның Рәсәй телдәрендәге бүлектәре араһында иң берҙәм һәм һөҙөмтәлеһе, һәм мин проектты тағы ла яҡшыраҡ, көслөрәк итеү өсөн үҙемдең белемен менән ҡыуанып бүлешәм.